# *Әсәйҙәр байрамы* ***“Әсәкәйем – күҙ нурым”***

***Маҡсат:***

- ✓ балаларға әсәйҙәр көнө тураһында мәғлүмәт биреү, легендалар, шиғырҙар, йырҙар, мәҡәлдәр аша әсәйҙәр тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү,
- ✓ балаларҙың телмәрен үҫтереү; шиғырҙарҙы дөрөҫ интонация менән һөйләү, йырҙарҙы матур йырлау, бейеүҙәрҙе бейеү, инсценировкалау һәләттәрен үҫтереү,
- ✓ әсәйҙәргә ихтирам, һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү,
- ✓ әсәләрҙә балалар менәнберлектә иртәлектә ҡатнашыуға әүҙемлек уятыу.

***Йыһыз:*** слайд, балаларҙың һөйләүе буйынса видеояҙма, уйындарға, сценкаларға атрибуттар

*Көй аҫтында балалар залға инәләр.*

I алып барыусы:

- Хәйерле көн, хөрмәтле әсәйҙәр, ҡунаҡтар! Бөгөн беҙ һеҙҙең менән әсәйҙәр байрамына йыйылдыҡ.

Берҙән – берем, күҙ нурым, тип
Һәр саҡ арҡаңдан һөйә.
Сирләгәндә төн йоҡламай,
Зарыңды белә, көйә.
Кем һуң ул һинең өсөн?
Ул – һөйөклө әсәйем.

II алып барыусы:

- Ә ҡасан барлыҡҡа килгән һуң был байрам? Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында балаларын юғалтҡан әсәйҙәр бик күп күҙ йәштәре түгә. Әсәйҙәрҙең сабырлығы, түҙемлеге, хеҙмәте өсөн “Ҡаһарман әсәй” ордены булдырыла. 90 – сы йылдарҙан алып ноябрҙең һуңғы аҙнаһында бөтә Рәсәйҙә “Әсәйҙәр көнө” билдәләнә.

I алып барыусы:

- Әсәй ул – һәр кемдең иң ҡәҙерле, иң изге кешеһе. Бәпестең тәүге һүҙе лә “әсәй”. Әсәй беҙгә ғүмер бүләк иткән. Әсәйгә мөхәббәт – тәбиғәттән. Был тойғо мәңгелек.
- Ә хәҙер һүҙ балаларға:

Әсәй ул – һауа!
Әсәй ул – яҡтылыҡ!
Әсәй ул – бәхет!
Әсәй ул – йылылыҡ!

Әсәй ул – тыныслыҡ!

- Мин әсәйемде яратам!

***Йыр “Мин әсәйемде яратам”***

*Балалар ултырғыстарға ултыра.*

II алып барыусы:

- Әсәйҙәребеҙҙе йылына ике тапҡыр ҡотларға мөмкинселек бар. Әсәйҙәргә бағышлап бик күп йырҙар, әҫәрҙәр, шиғырҙар яҙылған. Хәҙер әсәйҙәренә арнап балаларыбыҙ һөйөү тулы шиғырҙарын ишеттерер.

***Балалар шиғыр һөйләй.***

1-се бала:
Иртән һөйөп уята,
Эсерә тәмле сәйен.
Баҡсаға ла оҙата
Көләс йөҙлө әсәйем.
Ҡаршы ала йылмайып,
Ашы, сәйе өҫтәлдә.
Өйҙө матурлап ҡуя
Ҙур ҡунаҡты көткәндәй.

2-се бала:
Әсәйҙәр берәү генә,
Беләйек ҡәҙерҙәрен.
Һәр эштә ярҙамлашып,
Күрәйек күңелдәрен.

3-сө бала:
Бик матур минең ҡурсағым,
Әсәйемә оҡшаған.
Шауламағыҙ, ныҡ баҫмағыҙ.
Ҡурсағым да, әсәйем дә,
Икеһе лә йоҡлаған.

4-се бала:
Әсәйем эштән ҡайтыуға
Иҙәнде йыуып ҡуям.
Ҡасан ҡайта инде, тиеп,
Һағынып көтөп алам.

5-се бала:
Мин бәхетле, бик бәхетле,
Әсәйем янда һәр саҡ.
Һин булғанға ғына, әсәй,
Көндәрем яҡты һәр саҡ.

I алып барыусы:

- Беҙҙе тормош ауырлыҡтарынан һаҡлап, яманлыҡтарҙан яҡлап, насар сирҙәрҙән ҡурсалап тороусы изгеләрҙән изге зат – әсәйҙәр.

***Әсәйҙәр тураһында притча. Көй яңғырай.***

Бәпес тыуыр алдынан аллаға һорау бирә:

- Иртәгә Һеҙ мине Ергә ебәрәһегеҙ, унда мин кем менән йәшәйәсәкмен?
- Мин һиңә фәрештә бүләк итәм, ул һәр ваҡыт һинең янында булыр.
- Мин һауала көләм, йырлайым. Миңә бында оҡшай.
- Ерҙә лә һиңә рәхәт буласаҡ. Фәрештәң һинең менән бергә йырлар, көлөр, ул һиңә үҙ мөхәббәтен бүләк итер.
- Ә мин уның телен нисек аңлармын һәм мине кем ҡурҡыныстарҙан ҡурсалар?
- Һинең фәрештәң ҡурҡыныстарҙан ҡотҡарыр.
- Ә уның исеме кем булыр?

- Исеме унының мөһим түгел. Һин уны ӘСӘЙ тип йөрөтөрһөң.

I алып барыусы: (***Ҡыҙҙар бейеүгә әҙерләнергә сыға)***

- Әсәләр тураһында күпме генә һөйләнһә лә, уларҙың күңел йылылығын, гүзәллеген, яғымлылығын әйтеп бөтөрөрлөк түгел.

II алып барыусы:

Әсәйем, күҙ нурым,
Йылмая йөҙҙәрең.
Йылытып йөрәкте
Нур һибә күҙҙәрең.

Әсәйем, алтыным,
Һин бит иң яҡыным.
Үҙеңә гел тарта
Күңелең ялҡыны.

I алып барыусы:

- Ә хәҙер ҡыҙҙар башҡарыуында бейеү.

***Ҡыҙҙар бейеүе.***

I алып барыусы:

- Әсәйҙәр һәр ваҡыт ниндәйҙер эш башҡаралар: тәмле ашын да бешерәләр, балаларын да ҡарайҙар, эшкә лә йөрөйҙәр.
- Балалар, һеҙ әсәйҙәрегеҙгә нисек ярҙам итәһегеҙ?
  (Балаларҙың яуаптары).
- Азалияның әсәһенә нисек ярҙам итеүен йырын тыңлап белербеҙ.

***Йыр "Әсәйгә ярҙам итәм"***

II алып барыусы:

- Ә малайҙарыбыҙ әсәйҙәренә нисек ярҙам итәләр икән? Әйҙәгеҙ, малайҙарыбыҙҙан әсәйҙәренә иртәнге аш әҙерләтәйек. Сөнки әсәйҙәр һәр ваҡыт иртәнсәк эшкә ҡабалана. Был уйынға … сығығыҙ. Тағы ла беҙҙең әсәйҙәребеҙ кәрәк була.

***Уйын "Әсәйҙәргә аш әҙерләү"*** (әсәйҙәр менән бергә)

- Ҙур рәхмәт. Бик тәмле булғандыр. (Әсәйҙәр рәхмәт әйтһен).
- Хәҙер балаларҙы полька бейеүенә саҡырабыҙ.

***Бейеү "Полька"***

I алып барыусы:

- Балалар әсәйҙәргә арнап йыр ҙа йырланылар, шиғырҙар ҙа һөйләнеләр, иртәнге аш та әҙерләнеләр, бейенеләр ҙә, ә әсәйҙәребеҙ балаларға яуап итеп бишек йыры әҙерләгәндәр. Рәхим итегеҙ!

***"Бишек йыры" (әсәй башҡара)***

II алып барыусы:

- Әсәйҙәр тураһында бик күп мәҡәлдәр һәм әйтемдәр бар. Балалар, әсәйҙәр тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ? Әйҙәгеҙ, әсәйҙәр ҙә ярҙам итһен.

Ҡояш – яҡтылыҡ, әсәй – бәхетлек.

Әсәйгә бөтә балалар ҙа бер.

Әсә йөрәге ҡояштан да нығыраҡ йылыта.

Ҡош яҙға ҡыуана, бәпес – әсәйгә.

Һәр әсәгә үҙ балаһы яҡын.

Әсәйҙән дә яҡын иптәш юҡ.

- Рәхмәт, балалар! Бик күп мәҡәлдәр беләһегеҙ.

**(Балалар сценкаға сыға)**

***Көй яңғырай. "Сәскәләр бейеүе"***

***Сценка "Терпекәй"***

Йәшәгән, ти, урманда терпе. Бер көн терпе әсәһенә сәскә бүләк итергә уйлаған.

Терпе: - Һаумыһығыҙ, сәскәләр, фр – фр!

Сәскәләр: - Хәйерле көн, көн!

Терпе: - Сәскәләр, зинһар өсөн, әйҙәгеҙ минең әсәйемде ҡотлайыҡ.

Сәскәләр: - Беҙ риза, ә ҡайҙа барырға?

*Шул ваҡыт урман эсенән Төлкө килеп сыға.*

Төлкө: - Ниндәй тәмле, ням – ням.

Хәҙер мин һине ашайым, ам – ам.

Терпе: - Ай, мин ҡурҡам, фр – фр, ярҙам итегеҙ!

*Терпе сәскәләр араһына йәшенә, төлкө сәскәләр тирәләй әйләнә лә китә.*

*Урман эсенән Терпекәйен эҙләп Әсәй терпе сыға.*

Әсәй төлкө: - Ниндәй матур сәскәләр, ә ҡайҙа һуң минең терпекәйем?

*Терпе сыға.*

Терпе: - Әсәй, мин сәскәләр араһында, фр – фр.

Әсәй, һине байрам менән ҡотлайым

I алып барыусы:

- Терпекәй әсәһенә сәскә бүләк итте, ә беҙҙең **Ғәзинур** әсәһенә шиғыр арнаған. Әйҙәгеҙ, тыңлайыҡ.

**Шиғыр:** Әсәйемдең ҡулы алтын,
Тәмле аштар бешерә.
Энә алһа ҡулдарына
Матур кейемдәр тегә.

II алып барыусы:

- Ысынлап та, әсәйҙәр нимәгә тотонһалар ҙа, бөтә эштәре лә ҡулдарынан килә. Әйҙәгеҙ, әсәйҙәребеҙгә ял биреп уларҙы байрамса биҙәндерәйек.

***Уйын "Әсәйҙе биҙәндер"***

*5 бала әсәйҙәрен биҙәндерә.*

- Әсәйҙәребеҙ тағы ла матурыраҡ булып китте. Әйҙәгеҙ әле, ысын йондоҙҙар һымаҡ әсәйҙәребеҙ көй аҫтында үтһендәр.

*Зал буйлап әсәйҙәрҙең* ***дэфилеһы***

I алып барыусы:

- Бөгөн балалар йырланылар ҙа, бейенеләр ҙә, әсәйҙәргә шиғырҙар, мәҡәл – әйтемдәр ҙә бағышланылар. Ә киләһе сәләмде экран аша ҡарағыҙ!

***Экран. (Балаларҙың әсәйҙәре тураһында һөйләүе)***

*Балалар әсәйҙәренә теләктәрен еткерәләр.*

Ә хәҙер ҡәҙерле әсәйҙәр, хөрмәтле ҡунаҡтар, һеҙҙең өсөн музыкаль бүләк. Төркөмөбөҙ тәрбиәләнеүсеһененең атаһы һәм әсәһе *башкарыуында йыр.*

- Рәхмәт. Балалар, йырға тороғоҙ.

***Йыр "Һәр ваҡыт булһын ҡояш" (Балалар һәм әсәйҙәр бергә башкара)***

II алып барыусы: - Ҡәҙерле әсәйҙәр, ҡунаҡтар! Һеҙҙе тағы ла байрам менән ҡотлайбыҙ! Ғаиләләрегеҙгә именлек, күңелдәрегеҙгә тыныслыҡ теләйбеҙ!